# ЯҘМЫШТАР...
## нәҫелдәр барланды?

“Шәжәрәләр тураһында беҙ бәләкәйҙән ишетеп үҫтек. Ул сакта тиҫтерҙәремдең күбеһе шәжәрә тигән һүҙҙе белмәй ине әле. Атайым Миңләхмәт Ғимран улы (1913-1999) бөтә аймактары менән тиҫтәнән ашыу быуынын, ауылдағы фамилияларҙың ҡайһы берҙәренең алты-ете, ә күптәрҙең дүрт-биш быуынына тиклем яттан белә ине. Уның һөйләүенсә, олатайымдарҙың дүрт шәжәрәһе булған: икәүһе – һарыҡ тиреһенә, тағы береһе, бәләкәй ашъяулык ҙурлығындайы иҫке кағыҙға яҙылған. Ә дүртенсеһен Ғимран олатайымдың (1882-1960) бер туған энеһе Ғабдрахман бабай (1884-1918), ҡағыҙҙы тукымаға йәбештереп, карта һымаҡ, бөкләнгән урынынан һынмаһын өсөн, ара ҡалдырыбыраҡ, иҫке шәжәрәләрҙән күсереп, өҫтәп ҙурайтып, буш урын ҡалдырып, 1916 йылда яңынан эшләгән. Шәжәрәнең дүрт мөйөшөнә Ғосман хажи олатайҙың, бер мөйөшкә Ғимран олатайҙың, өсөнсө мөйөшкә тағы бер олатайҙың, дүртенсеһенә үҙенең исемен яҙып ҡуйған”, – тип яҙҙы Әлфәт ағайым үҙенең “Таймаҫ ауылы” китабында.

Атайым миңә ошоларҙы һөйләгәйне: “Тәсләп һалһаң – ыҡсым китап кеүек, йәйеп ебәрһәң – бер балаҫ кеүек, 12-ме, 24 биттәнме тора ине. Ә ундағы исемдәр биш тин акса ҙурлығына түңәрәктәр эсенә, бер-береһенә яҡын итеп, тәңкә-тәңкә теҙелеп, хатта бар ауыл кешеләре тиерлек яҙылған ине. Олатайың ваҡыты-вакыты менән шәжәрәләрҙе йәйеп һала ла, беҙҙе, балаларҙы уратып ултыртып, ятлата: “Бына шул-шул олатайҙарыбыҙға тиклем белһәгеҙ, хәҙергә шул еткән һеҙгә”, – тип әйтә торғайны.

Беҙгә ул күбергән ҡағыҙға яҙған шәжәрәнән өйрәтер ине. Ҡайһы сакта һарыҡ тиреһенә яҙылған шәжәрәләрҙе лә алып, унан да күрһәтер ине. Шуныһы хәтерҙә ҡалған, тирегә яҙылған шәжәрәнең төпкө өлөшө әҙерәк башкаҫараҡ ине. Унда Таймаҫ ҡарт та, йәнә бер нисә әүәлге олатайҙар исеме яҙылған булғайны. “Был олатайҙар кем булған?” – тигән һорауға Ғимран олатайым: “Ул олатайҙар ҙур кешеләр булғандар, йә әүлиә, йә сәсән, йә булмаһа, батыр кеше булғандар. Шул олатайҙарға оҡшаһын тип, уландарына ҡайһы саҡ исемде тағы ла яңыртып ҡушыр булғандар”, – тип аңлатыр булған.

Исән ҡалған биш шәжәрәлә Ялан-Бөрйән ырыуы Ҡалмаҡ (Күрәҙә) араһына (Таймаҫ ауылы) ҡарай. Ғимран Ғосман улы Ҡобағошов шәжәрәһенең тәүге варианты, академик Р.Г.Кузеев билдәләүенсә, XVIII быуат аҙағы – XIX быуат башынан да һуң түгел (бынан 200-250 йылдар элек үк) төҙөлгән. Ә тирегә яҙылғандары унан да боронораҡ осорға ҡарай. Улар Бөрйән ырыуы шәжәрәләренең иң боронғолары.

Кенәз Исәүкәй бей – 1557 йылда Иван Грозный батшалыҡ иткән дәүерҙә дүрт ырыу башкорттары (Үҫәргәндән – Бикбау кенәз, Ҡыпсаҡтан – Ҡаракужаҡ кенәз, Тамъяндан – Шағәли Шаҡман кенәз менән берлектә) Аҡ Батша грамотаһын ала.

Уның улдарының береһе – Таймаҫ бей (Таймаҫ ауылын яңыртып нигеҙләгән) – уның улы – Кенәз Бурансы бей (йәгни Кенәз Буранғол бей).

Кенәз Тукатар Азаматов менән кенәз Исәүкәй бейҙең ейәне – Кенәз Бурансы бей йәгни Буранғол бей кенәз 1627 йылда һайылмыш йылғаһы башынан алып һакмар йылғаһы тамағына тиклем (бөтә ҡушылдыктары менән), Оло Көйөргәҙе (Юшатыр) һәм Бәләкәй Көйөргәҙе (бөтә ҡушылдыктары менән) буйындағы ерҙәргә Батша грамотаһы алалар. Улар, был грамотаны алғанда 1557 йылда алған Батша грамотаһына таяна. Был документта былай тиелә: принял Тахтар Азаматов, в чем и расписался”.

Бер аҙ ваҡыт үткәс, 1700 йылдың март айында бөрйәндәр шул ерҙәргә тағы ла “владеная память” ала.

Беҙҙең нәҫелгә элек-электән сәсәнлек, уҡымышлылыҡ хас булған. Олатайым зирәк, сәсән телле булған. Әгәр кәрәк икән, күҙ асып йомған арала бәйет, йыр сығарып, уйлап ҡына, килештереп, кешенең һынын ҡатырғансы, тапҡыр һүҙ әйтер булған. Шуға күрә уны Ғимран сәсән тип йөрөткәндәр. Туй булһа ла, түрә килһә лә, бәйет, йыр әйтергә тип, уны саҡырыр булғандар.

Атайым Миңләхмәт Бөйөк Ватан һуғышының башынан аҙағынаса утты-һыуҙы кисеп, Берлингаса барып етеп, ҡылған батырлыктары өсөн бик күп миҙалдар алып, 1946 йылда ғына һуғыштан әйләнеп ҡайта. Атайым һуғыштан һуң оҙаҡ йылдар тыуған Таймаҫ совхозында ферма мөдире, бригадир булып эшләне, йыр-бейеүгә, һүҙгә бик маһир булды. Атайымдың бер туған энеһе Нуриман ағай ҙа оло талант эйәһе ине. 1970-73 йылдарҙа СССР Энергетика министрлығы менән контракт буйынса Алжирҙа эксперт булып эшләне. Алжирға китер алдынан өс ай эсендә инглиз һәм ғәрәп телдәрен өйрәнеп өлгөрҙө. Өфө нефть ғилми тикшеренеү институтында лаборатория мөдире булды, техник фәндәр кандидатына диссертация яҡланы. Техник фәндәр докторы дәрәжәһенә дәғүә итеүгә диссертацияһы әҙер ине, үкенескә ҡаршы, яҡлап өлгөрә алманы – 51 генә йәшендә операция өҫтәлендә вафат булды...

Йәнә бер туған ағайым – композитор, фольклорсы, башкорт композиторҙары мәктәбенең сағыу вәкиле, бик күп методик китаптар авторы, профессор, онотолоп бөткән башкорт музыка ҡоралдарын терғеҙеп, Өфө сәнғәт училищеһы базаһында Башкорт дәүләт филармонияһы ҡарамағында Башкорт халыҡ инструменттары оркестрын булдырған сағыу шәхес Айрат Ҡобағошов. Бына шундай оло талант эйәләренә бай беҙҙең Ҡобағошовтар нәҫеле. Үкенескә ҡаршы, халыҡ өсөн бөйөк эштәр ҡалдырған ағайҙарымдың береһе лә хәҙер иҫән түгел инде.

Һүҙҙе йомғаҡлап шуны әйтергә теләйем: Шәжәрә байрамдарын тәүге йылдарҙа уҙғарылғандары менән сағыштырып ҡараһаҡ, бик ҙур айырма күренә. Улар йылдан-йыл камиллаша, методик алымдар менән байытыла бара, юғары кимәлдәге концерт номерҙары менән аралаштырылып алып барыла. Элегерәк сәхнәгә туған-тыумаса менән күмәкләп сығып баҫһалар, хәҙер был мөһим түгел, бер генә кеше лә үҙ ырыуы тураһында ентекләп бәйән итә ала. Тағы ла шуныһы, Шәжәрәне барлау хәҙер башлыса электрон варианта әҙерләнелә. Ә уларҙа күпме яҙмыш ята, тарих биттәренә байҡау һала! Ошо сараларҙың юғары кимәлдә ойошторолоуында бик ҙур роль уйнаған Ҡала мәҙәниәт һарайының методика булеге белгестәре Рәмилә Ғаяз ҡыҙы Нәзирова, Хәлиҙә Файзрахман ҡыҙы Абдрахманова һәм ҡала хакимиәте мәҙәниәт булегенең баш белгесе Раушания Әсхәт ҡыҙы Кусмәеваға афарин тип әйтергә генә ҡала. Төрлө милләт вәкилдәре булған, исемдәре ҡалабыҙға бәйле көслө шәхестәрҙе, нәҫел-ырыуҙарҙы табып, уларҙы ошо ғәжәп бай йөкмәткеле, ҡыҙыҡлы сарала ҡатнашыуға йәлеп итеп, дәртләндерә белгәндәрә өсөн рәхмәт. Күҙгә күренмәгән ифрат ауыр хеҙмәттәрендә уларға киләсәктә лә ҙур уңыштар теләйек.

**Роза ҠОБАҒОШОВА.**

ГРАНТТАР

# Китап “йәнле биткә” әйләнгәндә донъя йәмләнә

**Тормошта китап уҡыған кешенән дә мәҙәнилерәк кеше юҡ, минеңсә. Ошо йылдың май айында Рәсәй кимәлендә үткән “Китап байрамы”нан һуң бығa нығыраҡ инандым. Китапҡа йөҙ менән боролоу көндән-көн күҙәтелә. Башҡортостан мәҙәниәт министрлығының һәм Башҡортостан яҙыусылар союзының “Китап” нәшриәтенән китаптар һатып алып, республика райондарында таратып йөрөүе лә маҡтауға лайыҡ. Китапҡа булған ыңғай мөнәсәбәтте тергеҙеү – беҙҙең ҡалабыҙҙа ла күҙәтелә.**




**Елена Калюжная әкиәттәр, китаптар иле менән таныштырҙы.**

Күптән түгел “Фабри” сауҙа үҙәгендә “Йәнле биттәр” исемле иждеи күргәҙмә үтте. Мәҙәни башланғыстарҙың президент фонды ярҙамында тормошҡа ашырылған был проекттың авторҙары булып был юлы Стәрлетамаҡ ҡалаһының “Үҙәкләштерелгән китапхана системаһы” хеҙмәткәрҙәре ҡатнаша. Уның төп максаты – китапханасыларҙың балалар араһында әкиәттәр аша уҡыуға һөйөү уятырға тырышыуы. “Ни өсөн беҙ әкиәттәрҙе һайланыҡ? Сөнки беҙ һәр ваҡыт әкиәттең аҙағында нимә көткәнен беләбеҙ. Әкиәттә, ғәҙәттә, изгелек еңә бит инде. Беҙ геройҙың бөтә ауырлыктарҙы еңеп сығыуын, уның ғәҙеллеккә өлгәшеүен аңлайбыҙ”, – ти китапханасылар үҙҙәре.

– Минеңсә, тормошта барыбыҙға ла изгелек һәр ваҡыт яуызлыкты еңер тигән ышаныс кәрәк. Өҫтәүенә әкиәттәр – ул һәр ваҡыт халыҡ аҡылының хазинаһы, халыҡ тәжрибәһе өлгөһө булып тора. Һәр халыҡтың үҙенә генә хас әкиәт геройҙары була. Китапханабыҙға килеүселәр һәм бөтә ҡала халҡы, ҡасандыр “Хроника Нарнии” китабы авторы Клайв Стейплз Льюис үҙенең туғанының ҡыҙына әйткәнсә, әкиәттәрҙе яңынан ятатһын һәм уҡырға теләһен ине, – тине Стәрлетамаҡ ҡалаһының Үҙәкләштерелгән китапхана системаһы директоры Елена Калюжная.

Әйткәндәй, проекттың беренсе этабы 15 августа башланды һәм 30 ноябрҙә тамамланды. Был осорҙа өс иждеи оҫтахана эшләне һәм уларҙа 200-гә яҡын бала ҡатнашты. “Ҡулдарым менән әкиәт ижад итәм” тип аталған беренсе оҫтаханала балалар китап уҡый, иллюстрациялар өйрәнә, әкиәт мотивтары буйынса йәнһүрәттәр ҡарай, үҙ ҡулдары менән яраткан әкиәттәрҙең сюжеттарын булдыра. Мәҫәлән, күргәҙмәлә “Колобок”, “Руслан һәм Людмила”, “Малахит ҡумтаһы”, “Төлкө, куян һәм Әтәс”, “Баба-Яга”, “Теремок”, “Добрыня Никитич һәм Змей Горыныч”, “Шалкан”, “Бүре һәм ете кәзә бәрәсе” кеүек әҫәрҙәрҙең тере макеттары менән танышырға мөмкин була. Был эштәрҙең матурлығы һәм масштабы һоҡландыра! Ә “Китап янындағы микрофон” оҫтаханаһына килгән балалар ҙа шулай уҡ ваҡытын файҙалы итеп үткәрә. Бында балалар һәм үсмерҙәр үҙҙәрен дубляж актерҙары ролендә һынап ҡарай, йәғни ысын тауыш яҙҙырыу студияһындағы ролдәр буйынса әкиәттәр яңғырата. Бер төркөм “Теремок” әкиәте өҫтөндә эшләһә, ә икенсеһе “Емеля” әкиәте өҫтөндә эшләй. “Һандағы китап” тигән өсөнсө оҫтаханала рус халыҡ әкиәте “Пузырь, соломинка и лапоть” мотивтары буйынса үҙҙәре йәнһүрәт төшөрә. Бында ла балалар китап уҡырға, анимация менән эшләү өсөн кәрәкле махсус программаларҙы өйрәнергә һәм әкиәт геройҙарын компьютерҙа үҙҙәре төшөрөргә тырыша. Әҙер йәнһүрәттең тауышы менән 3D анимация буйынса иждеи оҫтахана етәксеһе Владислав Созураков шөғөлләнә. Тиҙҙән “Йәнле биттәр” проектының икенсе этабы башлана, унда балалар әкиәт персонаждарын төшөрәсәк, шулай уҡ сәхнәлә театрлаштырылған тамашалар күрһәтәсәк. Был сараларҙан ҡалабыҙҙың балалар баҡсалары ла, мәктәптәр ҙә ситтә ҡалмаҫ тип ышаныс киләһе.

**Римма ҒӘЛИМОВА.**
**Эльдар ФӘТТӘХОВ фотолары.**



**Балалар әкиәт донъяһына сумған.**